Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡалаһы ҡала округының
“ 102-се башҡорт балалар баҡсаһы”
муниципаль бюджет  мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы

**Икенсе кескәйҙәр төркөмөндә**
**художестволы - эстетик үҫеш (рәсем) буйынса**
**ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге конспекты.**

Үткәрҙе: Дәүләтова Г.Ф.

**Өфө-2020 й.**

**Тема: "Ҡояшҡай".**

**Маҡсат**: түңәрәк формала предметты – ҡояшты тигеҙ буярға өйрәтеүҙе дауам итеү, ярҙамсыллыҡ тәрбиәләү, бумала менән дөрөҫ ҡулланыу, ҡул суҡтары моторикаһын үҫтереү, таҙалыҡ, бөхтәлек тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** гуашь, мольберт, палитра, ҡағыҙ салфетка, мамыҡлы таяҡсалар, альбом бите, өлгө, ҡояш һүрәте, аудиояҙма, ҡулсатыр.

**Әҙерлек эше:** әңгәмә, ҡояшты күҙәтеү, музыкаль-ритмик хәрәкәттәр "Ҡояш һәм ямғыр".

**Һүҙлек эше:** ҡояш, һары төҫ, ҡояш нурҙары.

**I .Ойоштороу.**

*Балалар ярым түңәрәк эшләп ултырғыстарында балаҫта ултыралар.*

**Тәрбиәсе:** - Балалар, иғтибар менән бер йомаҡ тыңлағыҙ һәм яуабын табырға тырышығыҙ.

*Кем иртән иң беренсе тора,*
*Бар(ы)һына ла йылыһын бирә,*
*Нурҙарын һибеп ерҙе йылыта*
*Һәм бүлмәбеҙҙе яҡтырта?* (ҡояш) .

- Эйе, дөрөҫ, ҡояш. Әйҙәгеҙ әле ҡояшты һәм беҙҙең дәрескә килгән ҡунаҡтарҙы сәләмләйек.

*-Һаумы, ҡояш!*
*- Һаумы, зәңгәр һауа!*
*- Һаумы, яҡты көн!*
*- Һаумыһығыҙ, ҡунаҡтар!*

- Балалар, бына иртән ҡояш сыҡты, төркөмөбөҙҙө йылытты һәм яҡыртты. Бүлмәбеҙ тағы ла йылыраҡ булһын өсөн ҡояш һүрәтен эшләйек.

**II. Эш төрөн аңлатыу.**

Балалар өҫтәл артына барып ултыралар. Тәрбиәсе балаларға ҡояш һүрәтен күрһәтә. Ҡояштың формаһын, төҫөн билдәләйҙәр, бергәләп ҡояшты һауала төшөрөп ҡарайҙар. Тәрбиәсе ҡояш һүрәтенең эҙмә-эҙлекле төшөрөүҙең өлгөһөн күрһәтә.

**III. Үҙ-аллы эш.**

**1)** Өҫтәлдә палитраға һалынған һары гуашь, бумала һәм альбом биттәре ята. Талғын көй ҡуйыла. Балалар алдан әҙерләнеп бирелгән альбом битендәге түңәрәкте һары төҫкә буяйҙар. Тәрбиәсе айырым балаларға ярҙам итә.

**2) Ял минуты.**

- Балалар, һеҙ буяған ҡояш һүрәте кибә торһон, ә беҙ һеҙҙең менән уйнап алайыҡ.

*Балалар балаҫҡа сығып " Ҡояш һәм ямғыр " музыкаль-ритмик хәрәкәттәр эшләп уйын уйнайҙар. ( Күңелле көй яңғырағанда балалар төрлө хәрәкәт эшләй, ямғыр тауышын ишеткәс ҡулсатыр аҫтына йыйылалар . Хәрәкәттәр бер-нисә тапҡыр ҡабатлана ).*

**3) Үҙ- аллы эште дауам итәләр.**

*Балалар өҫтәл артына барып ултыралар.*

- Балалар, беҙҙең һары түңәрәк кипкән, ләкин бында нимәҙер етмәй түгелме? (ҡояш нурҙары).

*Балалар мамыҡ таяҡсалар менән ҡояш нурҙарын эшләйҙәр.*

**IV.Йомғаҡлау.**

- Әйҙәгеҙ әле, балалар килеп сыҡҡан һүрәттәребеҙҙе ҡарайыҡ. Беҙҙең ҡояш ниндәй төҫтә, ниндәй формала булды?

- Һүрәтегеҙ оҡшанымы? Һеҙ төшөргән ҡояш кәйефтәрегеҙҙе күтәрҙеме? Ә хәҙер кемдәрҙең кәйефе күтәренке –сәпәкәй итегеҙ, кемгә бик күңелле түгел –күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ. Бер-берегеҙгә ҡарап йылмайығыҙ! Һәр көнөгөҙ ҡояш кеүек яҡты, матур булһын! Афарин, балалар!